**Төп белем биреү программаһының ҡыҫҡаса аннотацияһы**

мәктәпкәсә белем биреүҙең төп белем биреү программаһы

«Тыуғандан алып мәктәпкә тиклем»

Н.Е. Веракса, Т.С.Комарова, М.А. Васильева редакцияһында

Программаның **төп маҡсаты** булып кескәйҙәргә бала саҡ дәүерен ошо осорға хас булған рәүештә йәшәп үткәреү өсөн тейешле шарттар тыуҙырыуҙы күҙ уңында тота. Кешенең шәхес булараҡ формалашыуына бала саҡта нигеҙ һалына, ул балалыҡтан ҡыуаныс, шатлыҡ, илһам, дәрт алып, физик һәм психик яҡтан үҫергә, тирә-йүнде танып-белергә һәм аң-белем даирәһен үҫтерергә, кешеләр менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡорорға, йәшәйештә үҙ урынын таба белергә өйрәнә. Был маҡсаттар кескәйҙәр эшмәкәрлегенең төрлө төрҙәрендә: уйында, үҙ-ара аралашыуҙа һәм һөйләшеүҙә, хеҙмәттә, танып-белеүҙә-эҙләнеүҙә, эшмәкәрлектең продуктив төрҙәрендә (художество-эстетик үҫештә, ҡоролмалар төҙөүҙә һ.б.), музыкала, нәфис әҙәбиәт менән танышыуҙа тормошҡа ашырыла.

Программаның маҡсаттарына ирешеү өсөн түбәндәге бурыстарҙы хәл итеү кәрәк:

- баланың һаулығын һаҡлауҙы, кескәйҙәрҙең бер-береһе һәм ололар менән ыңғай мөнәсәбәттә булыуҙы һәм уларҙың төрлө яҡлап үҫеш кимәлен тәьмин итеүҙе ойоштороу;

- балаларҙы асыҡ күңелле, алсаҡ, ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем, тырыш, эскерһеҙ итеп тәрбиәләү өсөн төркөмдәрҙә уларҙың бер-береһенә һәм ололарға ҡарата ихтирамлы һәм мөләйем ҡарашлы мөнәсәбәттә булыуын ойоштороу;

- тәрбиә һәм аң-белемгә өйрәтеү эшенең һөҙөмтәһе нәтижәле булһын өсөн балалар эшмәкәрлеген төрлөләндереү һәм уларҙы берләштереп үткәреү;

- балалар баҡсаһында тәрбиә һәм аң-белем биреү процесын ижади рәүештә ойоштороу;

- тәрбиә һәм аң-белем биреүҙә дидактик материалдарҙың төрлөлөгө һәм уларҙы ҡулланыу ысулдары балаларҙың шәхси һәләтен асырға һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерергә ярҙам итеүҙе ойоштороу;

- баланың ижад емешен хөрмәт менән ҡабул итеү;

- ғаилә менән балалар баҡсаһы тәрбиә һәм аң-белем биреү эшендә бер үк талаптар ҡуйып, бергә эш итеү;

- балалар баҡсаһы һәм башланғыс мәктәп эшендә күсәгилешлекте һаҡлап эш итеү;